Государственное бюджетное общеобразовательное учреждение
Стерлибашевская коррекционная школа-интернат для обучающихся
с ограниченными возможностями здоровья

| Рассмотрено на заседании | Согласовано | Утверждаю |
|---|---|---|
| ШМО старшего звена | | |
| | Заместитель директора по | Директор |
| Протокол № 5 от | УР | Афанасьев А.А. |
| « 29 » мая 2018г. | | |
| Руководитель Каримова АА. | Гайнуллина Д.Р. | « 3 » 09 2018г. |
| | « 31 » 08 2018 г. | |

# Рабочая программа
# по башкирскому (государственному)языку
# для 8 класса

**Срок реализации программы 1 год**

**учитель**

**Хуснетдинова Ф.С.**

2018-2019 учебный год

## Аңлатма яҙыу

Һаулығы буйынса мөмкинселеге сикләнгән уҡыусыларҙың 8-се класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.

Эш программаһы В.В.Воронкованың VIII-се төрҙәге махсус(коррекция) дөйөм белем биреү һәм АООП Стәрлебаш һаулығы буйынса мөмкинселеге сикле уҡыусыларҙың махсус (коррекция) дөйөм белем биреү программаһына нигеҙләнеп төҙөлгән.

**Дәреслек:** Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8- се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2006.

**Программа кимәле :** базислы

**Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**

Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Ғәбитова З.М. Уҡытыу рус телендә алып барған мәктәптәрҙең 7- 8- се кластарыөсөн “Башҡорт теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр. - Өфө:Китап, 2006. – 152 бит.

Усманова М.Г., Габитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: 5-11 класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө:Китап,2002.- 166 бит.

**Уҡыусыларөсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:** Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең 8-се класы уҡыусыларыөсөндәреслек. – Өфө: Китап, 2006.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:**

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорттеленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластарыөсөн) нигеҙендәтөҙөлдө. ТөҙөүселәреТоломбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгрград»,2008.Башҡортостан

Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Туҡбирҙетөпдөйөмбеле м биреүмәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу п ланы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла** :

- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Башҡортостан Республикаһының “Мәғариф тураһында” Законы;
- Башҡортостан Республикаһының “Уҡытыу һәм тәрбиә биреү” концепцияһы;
- Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

1. **т**елмәрэшмәкәрлегенформалаштырыу;
2. **т**елдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
3. **б**әйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙекүҙуңындатота.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менәнәҙәбиматериалдарыбергәкушыпөйрәнелә (интеграция).

3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығыпөйрәнелә (коммуникативйүнәлеш).

.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Мәктәпкә барабыҙ (6 сәғәт).**

Был тема буйынса 5-6 кластаүтелгәндәрҙе ҡабатлау, һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынсаәҙмә-әҙлекле һөйләмдәртөҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошоһ.б. хаһында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡойоу. 5-6 класта үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр ( 4 сәғәт)**

Көҙгө үҙгәрештәрҙе бергәләп күҙәтеү, кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу. Синтаксис. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Логик баҫым.Исем менән ҡылымды ҡабатлау

**Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы ( 2 сәғәт )**

Өфө - башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Рефераттар яҙҙырыу һәм уны класс алдында ҡыҫҡаса һөйләтеү кеүек эштәр ҡулланырға мөмкин. Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһеһәмуныңбирелеше.

**Хеҙмәт төбө - хөрмәт ( 4 сәғәт )**

Кеше тормошондахеҙмәттең роле, тигән темаға әңгәмә ҡороу. Данлыҡлыхеҙмәтветерандарыменәносрашыуойоштороу. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт , һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ябайһөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйәменәнхәбәрҙеңярашыуы. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

**Ҡыш дауам итә( 3 сәғәт )**

Ҡыш миҙгеле тураһындабелгәндәрҙесистемалаштырыу, һүҙле кбайлығынарттырыукеүекэштәрентеклеалыпбарыла. Ҡыштураһындатекстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр. Яңыйылменәнҡотлауоткрыткаһы яҙырға өйрәнеү. Уҡытыусыһайлаған текст буйынса изложение яҙыу. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры ( 2 сәғәт)**

С.Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Уның шиғырҙарын ятлау, шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә ойоштороу. С.Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙан төрлө ижади эштәр эшләтеү. ( һүрәттәр төшөрөү, стенгәзит сығарыу)һ.б. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә. Аныҡлаусы.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! ( 6 сәғәт )**

Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар- 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тултырыусы.

**Ай Уралым, Уралым...( 7 сәғәт )**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү,йәйге эштәр тураһында әңгәмә ойоштороу.

**Уҡыусыларҙың белеем кимәленә талаптар**

1. “Мәктәп” темаһы буйынса һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынсаәҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөү. Текст өҫтөндә эшләү, план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо, уҡыу әсбаптары, китапхана, беҙҙең класс тураһында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап һ.б. мәҡәлдәр ҡойоу.
2. Тәҡдим ителгән ситуация буйынса һорауҙар бирә белеү, уҡытыусының (йәкибашҡаларҙың) һорауҙарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менәнасыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү, бирелгән һорауҙарға тулы итеп яуап биреү, күренекле яҙыусыларҙың биографияһы ,ижады өҫтөндә ентекле эш алып барыу.
3. Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
4. Ҡысҡырып, шыма, ролләп, сәхнәләштереп һәм тасури уҡыу.
5. Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
6. Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
7. 65-70 һүҙ күләмендә диктант яҙыу; 80-90 һүҙ күсереп яҙыу
8. Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диолог һәм монологтар төҙөү. 7- се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

3 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү. Данлыҡлы кешеләр менән кисәләр, осрашыуҙар ойоштороу уларға ҡарата ихтирам, ғорурланыутойғоһоуятыу, кешелеклелек тәрбиәләү

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

**Баһалар нигеҙҙә уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.**

“5” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыһа,паузаларға иғтибар итһә,һорауҙарға тулы яуап бирһә уҡылған текстың йөкмәткеһентулы итеп һөйләп бирһә

“4” билдәһе ҡуйыла: әгәр уқыусы ижекләп уҡыһа,уҡығанда 1-2 хата ебәрһә,текстың йөкмәткеһен тулыитеп һөйләмәһә,шиғырҙарҙы уқытыусы ярҙамында һөйләһә.

“3”-билдәһе әгәруҡыусы ауыр һүҙҙәрҙе ижекләп тәу уқый алмаһа. Паузаларҙы дөрөҫ ҡулланмаһа. Текстың йөкмәткеһен уҡытыусы ярҙамында һөйләһә .

**Яҙма эштәрҙе баһалау**

Контроль эштәр: контроль диктанттан һәм контроль күсереп яҙыуҙан тора. Шулай уҡ грамматик эштәр тәҡдим ителә.
Диктанттар һаны: 5

**Диктанттар**

“5”- әгәр эш бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-1-3 хата
“3”-4-5 хата

**Грамматик эштәр**

“5”-әгәр эштәр бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-3/4 эш дөрөҫ эшләнһә
“3”-1/2 эш дөрөҫ эшләнһә

**Контроль күсереп яҙыу**

“5”-хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа

“4”-бер хата һәм бер төҙәтеү
“3”- ике хата һәм бер төҙәтеү

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- ижади эштәр башҡарыу(төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙыу, нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҡуйып яҙыу);
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- бирелгән тексты өлөштәргә бүлеү, исемләү, план төҙөү, план буйынса һөйләү.

1. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
2. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

**Уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге**

1. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2.Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология.
3.Аудиокассеталар балаларөсөн.
4.Дидактик һәм таратма материалдар.
5.Аудиоәсбап № 1. МостайКәрим, Назар Нәжми, ЗәйнәпБиишева һәм Рәми Ғарипов башҡарыуында шиғырҙар.
6.Русско-башкирский учебный словарь

**Материаль-техник ҡулланмалар**

1. Интерактив таҡта;;
2. компьютер;

.

**Төп әҙәбиәт исемлеге**


1. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8- се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2006.
2. Ғәбитова З.М. Уҡытыу рус телендә алып барған мәктәптәрҙең 7- 8- се кластарыөсөн “Башҡорт теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр. - Өфө:Китап, 2006. – 152 бит.
3. Усманова М.Г., Габитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәмизложениелар йыйынтығы: 5-11 класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө:Китап,2002.- 166 бит.


**Өҫтәлмә әҙәбиәт:**


1. Саяхова Л.Г., Усманова М.Г. Башкирско- русский и русско башкирский учебный словарь с грамматическим приложением.- СПб.6БХВ.- Петербург 2005.-224с.
2. ХисаметдиноваФ.Г.,Муратова Р.Т. русско –башкирский, башкирско- русский словарь- Уфа: ”Маленький гений Башкортостана”, учебно методический центр”Эдвис”, 2010.- 192 с.
3. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
4. Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».

5. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

**Яҙма эштәр төрҙәре:**

Диктант – 2

Диктанттар күләме: 75-80 һүҙ

Һүҙлек диктанты: 20-22 һүҙ

**Календарь-тематик планлаштырыу 8 синыф**

| № | | Тема | План. дата | Факт. дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **1. Мәктәпкә барабыҙ.** | | | |
| 1. | 1.1 | Мәктәпкә барабыҙ. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Көҙ күренештәре. | 05.09 | | |
| 2. | 1.2 | Б.Бикбай “Туған тел”. Ҡылымдар. | 12.09 | | |
| 3. | 1.3 | Р.Ниғмәтуллин “Тырышлыҡ”. Сифаттар. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 19.09 | | |
| 4. | 1.4 | Б.Рафиков “Илем,Башҡортостаным!”.Ҡушма һүҙҙәр. | 26.09 | | |
| 5. | 1.5 | Контроль диктант. “Ауылым тәбиғәте”. | 03.10 | | |
| 6. | 1.6 | Хаталар өҫтөндә эш. Әкиәт “ Зирәк ҡуян”.Ҡылымдар | 10.10 | | |
| | | **2. Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр.** | | | |
| 7. | 2.1 | Ф.Ғөбәҙуллина “Көҙ”. Һөйләм төрҙәре. С.Муллабаев “Көҙгө урман”. Һорау һөйләмдәр. | 17.10 | | |
| 8. | 2.2 | Көҙгө баҡса эштәре. Бойороҡ һөйләмдәр. З.Ханнанова “Һөт”. Өндәү һөйләмдәр. | 24.10 | | |
| 9. | 2.3 | А.Игебаев “Тәмленен дә тәмләһе”. Логик баҫым. | 07.11 | | |
| 10. | 2.4 | Б.Рафиков “Нисек әйтһен?”. Һөйләмдә тыныш билдәләре. | 14.11 | | |
| | | **3.Өфө менән танышыу.** | | | |
| 11. | 3.1 | Й.Солтанов “Өфө-беҙҙен баш ҡалабыҙ”. Н.Дәүли,С.Ситдиҡова “Өфө ни өсөн матур?”. | 21.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Эйә менән хәбәр. | | | |
| 12. | 3.2 | Р.Янбулатова,х.Әхмәтов “Гүзәл Өфөм баш ҡалам”. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелеше. Д.Әхиәрова “Орджоникидзе районы”. | 28.11 | | |
| | | **4. Хеҙмәт төбө-хөрмәт.** | | | |
| 13. | 4.1 | В.Моратова “Башҡорт әрме хеҙмәтендә”. Ябай һөйләм төрҙәре. Йыйнаҡ һөйләмдәр. | 05.12 | | |
| 14. | 4.2 | Н.М.Бадридзе “Зарядкаға баҫ!”.Тарҡау һөйләмдәр. | 12.12 | | |
| 15. | 4.3 | Н.М.Бадридзе “Зарядкаға баҫ!”. Юҡлыҡ,булмағанлыҡ төшөнсәһе. | 19.12 | | |
| 16. | 4.4 | “Алданған бүре”.Әкиәт. Һөйләм төрҙәре Н.Исламғолова “Ҡышҡы биҙәктәр”.. | 26.12 | | |
| | | **5. Ҡыш дауам итә.** | | | |
| 17. | 5.1 | Әнғәм Атнабаев ижады.Эйә менән хәбәр.Ҡыш дауам итә. | 16.01 | | |
| 18. | 5.2 | Н.Нәжми ижады . Эйә менән хәбәр. С.Әлибаев. Ҡышҡы урман. | 23.01 | | |
| 19. | 5.3 | Башҡортостан республикаһының Дәүләт флагы. Яңғыҙлыҡ исемдәр. | 30.01 | | |
| | | **6.Салауат Юлаев - халкыбыҙҙын милли батыры.** | | | |
| 20. | 6.1 | Салауат Юлаев – башҡорт халҡынын милли батыры. Риүәйәт. Палдискиҙа Салауат музейы. Аныҡлаусы. Б.Вәлид “Салауат маршы”. | 06.02 | | |
| 21. | 6.2 | А.Кузнецов “Салауаттан һорау алыу” картинаһы. Салауат һәйкәле.Тамырҙаш һүҙҙәр. | 13.02 | | |
| | | **7.Йәмле яҙ,һағындыҡ һине!** | | | |
| 22. | 7.1 | Салауат Юлаев шиғырҙары. | 20.02 | | |
| 23. | 7.2 | Йәмле яҙ,һағындыҡ һине! Тамырҙаш һүҙҙәр. | 27.02 | | |
| 24. | 7.3 | К.Кинйәбулатова “Йырлай-йырлай енеү яуланыҡ”. Тултырыусы. Тәүге космонавт. Һандар. | 06.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 25. | 7.4 | Р. Ниғмәти ижады. | 13.03 | | |
| 26. | 7.5 | Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп. Хәл. | 20.03 | | |
| 27. | 7.6 | М.Харис ижады.Үлемһеҙ батырлыҡ. Һөйләмден баш һәм эйәрсән киҫәктәре. | 03.04 | | |
| | | **9. Ай,Уралым,Уралым…** | | | |
| 28. | 8.1 | Ай,Уралым,Уралым… В.Исхаков “Талпан”. | 10.04 | | |
| 29. | 8.2 | М.Кәрим “Тыуған ил тураһында уйланыуҙар”. Һүҙлек менән эш. | 17.04 | | |
| 30. | 8.3 | Халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков. Һөйләмгә синтаксик анализ. Р . Бикбаев. Уралыма. | 24.04 | | |
| 31. | 8.4 | Р.Ниғмәтуллин ижады. З.Биишева. Йәшәү-хеҙмәт. | 08.05 | | |
| 32. | 8.5 | Йыллыҡ контроль диктант. “ Йәмле йәй етә”. | 15.05 | | |
| 33. | 8.6 | Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Йәшел алтын. А. Игебаев “Башҡортостан-илгенәм”. | 22.05 | | |
| 34. | 8.7 | “Һөйләмдең баш киҫәктәре” темаһы буйынса йомғаҡлау дәресе. | 29.05 | | |

Прошнуровано и пронумеровано

8 (восемь) листов

«__» ________ 201_ г.

Директор ____________ А.А. Афанасьев